Башҡортостан Республикаһы Күгәрсен районы муниципаль районының
Йомағужа ауылы “Ҡояшҡай” балалар мәктәпкәсә белем биреү
муниципаль автаномиялы учреждениеһы

Квест- уйын

“Башҡортостан буйлап сәйәхәт”

Төҙөнө һәм алып барҙы тәрбиәсе: Р.Р Ҡотләмбәтова.

Йомағужа,2021йыл

Квест-уйын.

Башҡортостан буйлап сәйәхәт

Маҡсат

Белем кимәлен күтәреү; Квест-технологияһын ҡулланыу.Балаларҙа башҡорт телен һәм тарихын өйрәнгәндә проблемалы ситуацияны булдырырға уларҙын ҡыҙыҡһыныуын артырырға.

Аң кимәлен үҫтереү,яңы һүҙҙәр менән танышыу һәм нығытыу,һүҙ байлығын артырыу.

Башҡорт халҡының тарихына ҡыҙыҙһыныу уятыу, туған телгә һөйөү, ихтирам хистәре тәрбиәләү.

Уйын барышы

Балалар, мин һеҙҙе ҡүреуемә бик шатмын.

Яҡынырaҡ килегеҙ әле, мин һеҙҙе яратып алайым. Һеҙҙен матур куҙҙәрегеҙҙе күрәйем. Һеҙҙә бер- берегеҙгә ҡарап йылмайып алығыҙ, ирендәр менән йылмаябыҙ.

Ишек шаҡыған тауыш ишетелә.

-Балалар, беҙгә почтальон хат килтерҙе. Уҡып ҡарайыҡ, ихтибар менән тыңлагыҙ!

Хат уҡыйым.

Әгәр бөтә булған маҡсаттарҙы, ҡаршылыҡты енеп сыҡһагыҙ һеҙҙе серле ҡумта көтә.

-Тырышабыҙмы балалар!

- Юлга сығайыҡ. Юл ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәйек. Мәкәлдәр әйтеп китәйек.

-“Айырылганды айыу ашар”.

-“Буленгәнде бүре ашар”.

-Юлда бергә йөрөү кәрәк.

-Дөрөҫ әйтәһегеҙ балалар.

1.Ҡаршылыҡ.

-Беҙ йәшәгән республика нисек атала?

-Башҡортостан.

-Башҡортостан флагы ниндәй төҫтә?

-Күк, аҡ, йәшел.

-Урталағы төҫөндә ниндәй сәскә һүрәтләнгән?

-Ҡурай сәскәһе.

Әйе дөрөҫ, ул ҡурай сәскәһе.

-Башҡортостан гербында ниндәй батыр һүрәтләнгән?

-Салауат Юлаев- ул башҡорт батыры.

Тәүге ҡаршылыҡты үттек, хәҙер юлға сығайыҡ.

2. Әҙәби туҡталыш.

Был туҡталышта тел һәм туған яҡ тураһында шиғырҙар һөйләргә тейешбеҙ. Беҙ башкорт яҙыусылары менән танышабыҙ, сөнки беҙ шиғырҙар, әкиәттәр укыбыҙ һәм яттан һөйләргә өйрәнәбеҙ. Беҙгә балалар һөйләп ишеттерерҙәр.

1. Эй туған тел, эй мтаур тел

Атам-әсәмдең теле.

Доньяла ҡүп нәмә белдем

Һин туған тел арҡылы.

2. Иле барҙын теле бар, теле барҙың көнө бар.

3. Әсәм теле миңә сәсән теле

Унан башҡа минең телем юҡ

Йөрәгендә рухы булмагандың

Кеше булырға ла хаҡы юҡ.

4. Беҙ башҡорттар. Ошо исем менән

Ерҙә йәшәү ҙур бәхет!

Йәшәйебеҙ был ерҙә

Бар халыҡтар менән берләшеп.

5.Ерҙә беҙгә ни кәрәк,

Атай һәм әсәй кәрәк.

Ерҙә беҙгә ни кәрәк

Беҙ йәшәгән өй кәрәк.

Ерҙә беҙгә ни кәрәк,

Беҙ йәшәгән ил кәрәк!

Афарин балалар! Беҙҙең районда бик күренекле яҙыусы бар, кем әйтер

-Зәйнәб Биешева!

3. Тәмлекәс тукталышы

Балалар, әйтегеҙ әле һеҙ ниндәй башҡорт милли аштар беләһегеҙ

-Ҡорот, бал, бауырһаҡ.

-Эйе, дөрөҫ!

Был рисыҡтар быуындан-быуынға күсеп килгән бик файҙалы аштар.

Ҡарағыҙ әле балалар! Бигерәк матур биҙәктәр менән төшөрөлгән һауыт-һаба...

Был башҡорт орнаменттары. Бәлки серле ҡумта ла бындалыр...

Беҙгә был тукталышта өлөштәрҙәй торған һурәт йыйырға кәрәк

Кем етеҙ, ихтибарлы икән ярышып ҡарайыҡ

-Орнаменты йыйып бөткәс кем дөрөҫ әйтер икән

Ҡусҡар—ата-бабайҙар малсылыҡ менән шөгөлләнгән.

Йөрәккә оҡшаған орнамент -ҡунаҡсылыҡ белдәргә.

Дүртмөйөш,ромб-ер эшкәртеү.

Афарин һеҙ балалар. Тырыштығыҙ.

4. Йәйләү тукталышы

Был тукталышта ла беҙгә һынауҙар әҙерләнгән. Ҡарағыҙ әле был нисек атала (тирмәне күрһәтеү)

-Тирмә!

-Тирмә ул ата- бабаларҙың күсеп йөрөтөп йәшәү йорто. Беҙҙә һеҙҙең менән тирмә уйынын яратып уйнайбыҙ.

Әйҙәгеҙ күңелле ял итеп алайыҡ.

Тирмә уйыны.

Беҙ куңелле шат балалар,

Түнәрәккә йыйылдыҡ

Уйнайбыҙҙа бейейбеҙ,

Матур тирмә яһайбыҙ!

Юлыбыҙҙы дауам итәйек, Ағиҙел йылғаһы буйлап. Ағиҙел-Башҡортостанда иң ҙур йылға.

5.Туҡталыш.

Беҙ үҙебеҙҙең балалар баксаһына ҡайтып еттек, бында Оҫтахана күргәҙмәһе ойошторолған. Был әйберҙәрҙе беҙ күргәҙмәлә, музейҙа гына ҡүрәбеҙ. Бөтә әйберҙәр ҙә ҡул менән эшләнгән. Был ҡурсаҡтарҙы оҫта ҡуллы тәрбиәсе Зимфира Абдулхай ҡыҙы ҡулдары менән үҙе эшләгән, матур-матур күлдәк,камзул тегеп кейҙергән.

Һеҙгә оҡшаймы балалар.

-Эйе

Ҡарағыҙ әле таҫтамал да сиккәндәр.

Ентекләп ҡарағыҙ балалар, бәлки серле ҡумта табырһығыҙ.

-Мин матур сигелгән яулыҡ таптым.

Яулыҡ таптығыҙмы

Әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ.

Яулыҡ һалам уйыны

-Кем беҙҙең көтөүсе була

Йәшерәм-йәшәрәм яулығымды

Йәшел ҡайын аҫтына

Һиҙҙермәйсә һалып китәм

Бер иптәшем артына.

Уйын аҙағында бер бала ҡурсаҡтар янында серле ҡумта табыуын белдерә.

Эй! Ҡумта серле ҡумта!- тип бергәләп ҡабатлағандан һуң серле ҡумтанан .”Саҡырыу” билеты

Алабыҙ. “Балалар, һеҙ талапсан, тырыш,отҡор!Беҙ һеҙҙе беренсе мәктәп музейына ҡунаҡка саҡырабыҙ”

-Беҙ мәктәпкә барабыҙ!

-Беҙ музейҙа барабыҙ!

Аҙығы: Ошоноң менән беҙҙең сәйәхәт тамам. һеҙгә оҡшанымы сәйәхәт!

-Оҡшаны. Бик оҡшаны.

Оҡшағас балалар, үҙебеҙҙә смайлик кеүек йылмайын сарабыҙҙы тамамлайыҡ.